**Муниципальное автономное дошкольное образовательное учреждение**
**детский сад «Теремок»с.Аскарово**
**муниципального района Абзелиловский район РБ**

# Өлкәндәр тәркәмендә дәрес конспекты

# “Башҡорт халҡының милли ашы – талҡан”

**Подготовила воспитатель**
**СаитгалинаАлия Вахитовна**

**Максат:** телмәр һәм һүҙлек запастарын үҫтереү, әкиәттең йөкмәткеһе менән таныштырыу һәм батырлыктың яуызлыкты еңеүен, әсене данлау, боронғо ата – бабаларыбыҙҙың ризык әҙерләүҙәге оҫталығын күрһәтеү, уларға хөрмәтле мөнәсәбәт тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу**: китап "Йәйғор" 152 – се бит, уйынсык ағас тирмән, ағас һауыт – һабалар, өй йыһазы урындык, әкиәткә төрлө һүрәттәр, талҡан оно( майланған он), башактар, ҡурмас, икмәк.

**План.**

1. Төркөмдө ойоштороу.
2. Тема өҫтөндә эш алымдары:
- Милли аш – талҡан тураһында әңгәмә үткәреү.
- Физминутка “Эш бөткәс, уйнарға ярай”.
3. “Батыр Ғайса” әкиәтен һөйләп ишеттереү.
4. Һүҙлек эштәре: Ғайса,ныбай, бәке, ҡурмас, талҡан, ҡайсылай, сихырлы көс.
5. Әкиәткә анализ биреү:
- Әкиәт оҡшанымы?
- Ниндәй персонаждар оҡшаны?
- Әсәһе Ғайсаға нисек ярҙам иткән?(ул батыр булған, әсәһен, иптәштәрен, тыуған ауылын яратҡан).
6. Шиғыр уҡып ишеттереү һәм хор менән ҡабатлау.
7. Талҡанды ауыҙ итеп ҡарау
8. Йомғаҡлау.

**Дәрес барышы:**

(Музыка залының төп яғында урындыҡ ҡуйылған. Урындыҡта бер бәләкәй ҡыҙ тирмән эргәһендә ултыра. Башында яулыҡ, альяпҡыс таҡҡан. Һулаҡай яҡта өҫтәл әҙерләнгән. Өҫтәл өҫтөндә касаларға талҡан һалынған).

Балаларҙы залға индереү; килгән ҡунаҡтар менән таныштырыу; һаулыҡ һорашыу.

- Балалар, бөгөн беҙгә күп нәмәләр эшләргә кәрәк. Бөтә эште эшләр өсөн беҙгә татыу, тәртипле, берҙәм булырға кәрәк, сөнки мәҡәлдә бушҡа әйтмәҙәр "берҙәмлектә – ҙур көс".
- Әйҙәгеҙ, төп яҡта ултырған ҡыҙ менән танышайыҡ, ул нимә эшләп ултыра икән.
- Һаумы ҡыҙыҡай, һинең исемең нисек?
- Гөлбикә минең исемем.(Исемдәрҙе әйтеп таныштырыу).
- Гөлбикә, һин, нимә эшләп ултыраһың?
- Ә һин нимәгә ултырғанһың?
- Был урындыҡ тип атала. Ул борондан килгән башҡорт халҡының өй йыһазы булып һаналған.
- Өләсәйем баҙарға китте, миңә талҡан тарта тор, тип әйткәйне.
- Ә был нимә?
- Был ҡул тирмәне. Боронғо ваҡытта һәр башҡорт ғаиләһендә ҡул тирмәне тотолған. Бойҙайҙан он яһау ошо ҡул тирмәне ярҙамында башҡарылған. Был ауыр эште ҡатын – ҡыҙ башҡарған.(Талҡанды әҙерләүҙең эҙмә – эҙлеге менән танышыу һәм икмәк оно менән сағыштырыу).

  (Аңлатыу барышында яны һүҙҙәрҙе хор менән дә, айырым да әйттереү).
- Әйҙәгеҙ, тиҙ генә Гөлбикәгә ярҙам итәйек, шунан һуң бергәләп уйнарбыҙ.

2. Физминутка:

Тирмән әйләнә, тирмән әйләнә,
Ҡурмас ваҡлана,ҡурмас ваҡлана.
Онон иләнек, һауытҡа һалдыҡ,
Майға болғаныҡ.

Музыкаль пауза үткәреү.

3. "Батыр Ғайса" әкиәтен һөйләү.

- Һүҙлек эштәрен үткәреү.